БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА В УСЛОВИЯХ ГЛОБАЛИЗАЦИИ И ПОЛИЭТНИЧЕСКОЙ СРЕДЫ: ОПЫТ И ПЕРСПЕКТИВЫ

ISBN 978-5-91608-181-7 С. 394-395

https://doi.org/10.31833/conf_ihll2019.074

УДК 371.398

**Г. Н. Хужина**

*МБОУ СОШ №10 г. Учалы*
*ул. Кирова, 6, Учалы, 453700 Россия*
*E-mail: huzhina_23@mail.ru*

## УҠЫУСЫЛАРҘЫҢ ТЕЛМӘРЕНДӘ ЕРЛЕ ҺӨЙЛӘШ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕНЕҢ САҒЫЛЫШЫ

В статье рассматриваются вопросы преподавания башкирского языка в условиях диалекта. Обосновывается важность развития литературной речи учащихся. Намечены пути совершенствования культуры речи школьников на родном языке.

*Ключевые слова:* башкирский язык, литературный язык, диалект, говор, обучение.

Учалы районында йәшәүсе башҡорттарҙың теле көнсығыш диалекттың мейәс һәм учалы һөйләштәренә ҡарай. Мейәс һөйләшендә районды ң төньяҡ һәм көньяҡ өлөшө һөйләшә. Учалы (асыуҙы) һөйләшенә районды ң типтәр-башҡорт ауылдарыны ң йәнле һөйләү теле ҡарай [Шәкүр, 2012]. Бында йәшәгән халыҡ үҙ телен онотмай, барлыҡ нескәлектәрен быуындан-быуынға еткерә килә. Йыш ҡына уҡыусылар әҙәби һүҙ менән диалект һүҙ араһында айырма күрмәй, бутап һөйләү осраҡтары йыш күҙәтелә.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларыны ң төп бурысы – уҡыусыларға ерле һөйләштең фонетик, лексик һәм грамматик үҙенсәлектәрен еткереү, уларҙы әҙәби тел өлгөләре менән сағыштырып биреү, уларҙы ң телмәрендәге диалект хаталарҙы иҫкәртеү. Уҡыусылар әҙәби тел нормалары менән һөйләш үҙенсәлектәрен белеп, уларҙы ң айырмалыҡтарын белергә тейеш. Шуға күрә лә башҡорт теле дәрестәрендә әҙәби тел нормалары ғына түгел, башҡорт диалектологияһы ла төплө яҡтыртыла. Мәҫәлән, башҡорт диалекттарына арналған дәрестәр 6-сы кластан уҡытыла башлай. Уҡыусылар диалект, һөйләш, һөйләшсә кеүек төшөнсәләр менән танышалар, ерле һөйләшкә хас үҙенсәлектәрҙе өйрәнәләр. 10-сы класта иһә диалектология буйынса төплөрәк белем бирелә. Мәҫәлән, улар башҡорт телендә 3 диалект (көньяҡ, көнсығыш, төнъяҡ-көнбайыш) диалект барлығын, уларҙы ң – һөйләштәргә, һөйләштәрҙең һөйләшсәләргә бүленеүен беләләр.

Уҡыусыларҙы Учалы районы башҡорттары һөйләү теленең ниндәй диалектҡа ҡарауы, уны ң ниндәй һөйләштәргә бүленеүе ҡыҙыҡһындыра. Уҡытыусы мәктәп балаларына учалыларҙы ң теле көнсығыш диалекттың мейәс һәм учалы һөйләштәренә ҡарағанын, был ике һөйләштең лексик, фонетик һәм грамматик үҙенсәлектәрен аңлатып бирә.

Учалы ҡалаһы 10-сы урта дөйөм белем биреү мәктәбе уҡыусылары районыбыҙҙың бөтә ауылдарына ла тиерлек ҡайтып йөрөйҙәр. Уҡыусыны ң районды ң ҡайһы ауылынан икәнен уны ң телмәренән дә, яҙма эштәренән дә күрергә мөмкин. Мәҫәлән, уҡыусы районды ң төньяҡ-көнсығыш ауылдарында йәшәгән өләсәй-олатайҙарына ҡунаҡҡа ҡайтһалар, уларҙа каникулдарын үткәрһәләр, уларҙы ң телмәрендә мотлаҡ өләсәй-олатайҙарыны ң һөйләше сағылыш таба: “Беҙҙең яҡ шундый матур, мындый яҡтар бүтән бер ерҙә лә юҡтыр ул”(дай-дәй ялғауындағы а өнө ы-ға күсә. ), “Уй йылғаһы үрҙәктәр менән туп-тылы”,

“Мында килеӊ әле”, “Тиҙ генә барыӊ!”, “Бәй, һин ҡайтҡаӊ икән”, “Минеӊ быуайым 3 эштә эштәй” һ.б.

Ата-әсәләре учалы (асыуҙы) һөйләшенә ҡараған Илсе, Илтабан, Иманғол, Ҡалҡан, Ҡунаҡбай, Мансур, Мулдаш, Рысай, Сәфәр, Ураҙ, Учалы, Юлдаш ауылдарынан булған уҡыусылар был һөйләшкә хас диалект һүҙҙәрҙе ҡуллана. Мәҫәлән, был һөйләштә һүҙ һәм ялғау башында – һ өнө урынына, һүҙ уртаһында һәм аҙағында ҫ өнө урынына с өнө тура килә: *саумы* (һаумы), *саулыҡ* (һаулыҡ), *син* (һин), *сиксән* (һикһән). Уҡытыусы был диалект хаталарҙы иҫкәртеп, уларҙы яҙыуҙа бөтөрөү өҫтөндә эшләргә тейеш. Йыш ҡына *с* хәрефе менән башланған һүҙҙәрҙе лә *һ* хәрефе менән әйтеү һәм яҙыу осраҡтары ла күҙәтелә: *самауыр* урынына *һамауыр*, *сәйнүк* урынына *һәйнүк*, *солан* урынына *һолан*. *Һеләүһен* ‘рысь’ менән *селәүсенде* ‘червь’ бер үк һүҙ итеп ҡабул итәләр.

Уҡыусылар *һандуғас, сыйырсыҡ* һүҙҙәрендә йыш ҡына хата ебәрәләр, был һүҙҙәрҙеӊ дөрөҫ яҙылышын һорайҙар. Дәрестә ҡыҙыҡлы хәлдәр ҙә булып тора. Бирелгән һүҙҙәрҙе башҡортсанан руссаға тәржемә итергә ҡушылғайны, бер уҡыусы *сыйырсыҡ* һүҙенеӊ янына ‘корова выходи’ тип тәржемәһен яҙып ҡуйған.

Райондыӊ көньяҡ-көнбайыш яғындағы ауылдарҙа үҫкән балаларҙыӊ телмәр үҙенсәлектәре райондыӊ төньяҡ-көнбайыштыҡыларынан айырыла. Мәҫәлән, һөйләштә туғанлыҡ мөнәсәбәтен белдергән һүҙҙәрҙеӊ өндәш формаһы бар. -ай/-әй өндәренә тамамланған ҡәрҙәшлек терминдары, баланыӊ ата-әсәһенә йәки кесе туғандыӊ яҡын оло туғанына өндәшкәндә, -ый/-ей формаһында әйтелә: *атый* – әҙәби телдә *атай, әсей* — *әсәй, апый* — *апай* һ.б.

Уҡыусы дәрестә яуап биргәндә, әҫәр буйынса фекер алышҡанда ҡулланылған диалект һүҙҙәргә иғтибар бик ителмәй. Уныӊ һәр бер һүҙе уҡытыусы тарафынан төҙәтелмәй. Әммә яҙма эштәр ваҡытында уныӊ диалект һүҙҙәрҙе ҡулланмай, әҙәби тел нормаларына таянып яҙыуы талап ителә. Хәҙерге заман уҡыусыларынан, бигерәк тә ҡала балаларынан, әҙәби әҫәрҙәр, романдар уҡытыу бик ауыр. Шуныӊ өсөн дә яҙыу телмәрҙәрендә күп кенә хаталар китә. Улар нисек һөйләшә, шулай яҙа. Орфография менән орфоэпия ҡағиҙәләрен айырмайҙар.

Диалект темаһына арналған дәрестәр диалект шарттарында башҡорт телен уҡытҡанда бик кәрәк. Телмәр культураһына эйә булған кеше телдеӊ диалекттарын да, дөрөҫ әйтелеш һәм дөрөҫ яҙылыш нормаларын да белергә тейеш.

### Әҙәбиәт

Шәкүр Р.З. Башҡорт диалектологияһы: уҡыу ҡулланмаһы. Өфө: Китап, 2012. 240 б.

**G. N. Khuzhina**

*Municipal budgetary educational institution*
*Secondary school № 10*
*st. Kirova, 6, Uchaly, 453700 Russia*
*E-mail: huzhina_23@mail.ru*

## REFLECTION OF DIALECTAL FEATURES IN THE SPEECH OF PUPILS

The article deals with the teaching of the Bashkir language in terms of dialect. The importance of the development of literary speech of pupils is substantiated. The ways of improving the culture of speech of schoolchildren in their native language are outlined.

*Keywords:* Bashkir language, literary speech, dialects, teaching.

### References

Shakurov R.Z. Bashkir dialectology: Textbook. Ufa: Kitap, 2012. 240 p.